# *Аңлатмалы яҙыу*

*«Шағир һәм һалдат М. Кәримдең яу юлдары буйлап» темаһы буйынса дәрес II курста 44.02.02. Башланғыс кластарҙа уkытыу һәм 44.02.01 Мәктәпкәсә белем биреү специальносы буйынса уkыусы төркөмдәр менән ойошторола. Студенттар әҙиптең һуғыш осоро ижады менән танышалар, яҙыусыларҙың бөтә совет һалдаттары кеүек ауыр юлдар үтеүен күрәләр, был дәһшәтле осорҙа яугирҙарҙың ниндәй тойғолар һәм хистәр кисереүен күңелдәренән үткәрәләр.*

*Башkорт теле һәм әҙәбиәте буйынса дәрестәр башkа предметтар менән бәйләп үткәрелә. Тәkдим ителгән дәрестә башkорт халkының Бөйөк Ватан һуғышы осоро тарихы һәм рәсем сәнғәте буйынса материалдарҙы файҙаландыk.*

*Студенттар менән эшләү өсөн төп метод итеп тикшеренеү методын һайланыk. М.Кәримдең ниндәй юл үтеүен асыkлау, шиғырҙарының йөкмәткеһен тикшереү кеүек эштәр башkарыу өсөн материалдарҙы уkытыусы алдан әҙерләп kуя. Тикшеренеү төркөмдәрҙә алып барыла. Һәр төркөмдә башkорт телендә яkшы һөйләшеүселәр булыуы шарт. Улар төркөм эсендә әңгәмә kороға ярҙам итәләр.*

*Студенттарҙың әҙерлеге төрлө. Шуға күрә студенттар мәктәптә башkорт телен дәүләт теле буларak уkыған төркөмдәрҙә тәkдим ителгән дәрестең тәүге этабы - схема эшләү, шиғырҙарҙы барлау, ат образына бәйле әҫәрҙәрҙе тикшереү кеүек эштәрҙе башkарғас, дәресте тамамларға мөмкин. Көслө студенттар уkыған төркөмдәрҙә kалған этаптарҙы ла үтергә тырышабыҙ. Шиғырҙарҙы тикшереүҙә традицион алымдарҙы ла kулландыk. Беҙҙеңсә, ниндәй генә яңы технологиялар тыумаһын, әҙәбиәт дәрестәрендә әҫәрҙең идея-тематик үҙенсәлектәрен тикшереүҙә йәнле әңгәмәне, уkытыусы һөйләүен бер ни ҙә алыштыра алмай.*

*Дәрестәрҙе төрлөсә ойошторорға була. Иң мөһиме - йәштәр яҙыусылар ижадына битараф kалмаһын, дәрес белем бирһен, уйландырһын, бөгөн генә түгел, киләсәктә лә һығымталар яһатһын, ә шиғырҙар уларҙың рухи донъяһын байытһын. Беҙҙең балаларҙы тәрбиәләйәсәк буласаk уkытыусылар республикабыҙҙың билдәле әҙиптәрен, шанлы тарихын белергә, ғорурланырға тейеш.*

## *Тема: Шағир һәм һалдат М. Кәримдең яу юлдары буйлап*

***Маҡсат һәм бурыстар:*** *студентарҙы М.Кәримдең һуғыш осоро ижады менән таныштырыу; шиғырҙарҙы анализлау буйынса күнекмәләрен үҫтереү; студенттарҙа Тыуған илгә һөйөү тойғоһон тәрбиәләү.*

**Йыһазландырыу:** *һуғышты һүрәтләүсе картина репродукциялары, М.Кәримдең фотоһүрәттәрен файҙаланып әҙерләнгән презентация, проектор, төркөмдәр өсөн карточкалар, карта, дәреслектәр, магнитофон.*

***Методтар һәм алымдар:*** *тикшеренеү, әңгәмә, әҙәби текст өҫтөндә эш, үҙ аллы эш, уҡытыусы һөйләүе, күргәҙмәлелек.*

***Ойоштороу формалары:*** *фронталь, төркөмдәр менән эшләү, индивидуаль эш.*

***Дәрескә әҙерлек:*** *уҡытыусы төркөмдәрҙең тикшеренеү эше өсөн кәрәкле материал, карточкалар әҙерләй. Студенттар М. Кәримдең һуғыш осоро ижадына ҡараған әҫәрҙәре менән танышалар, оҡшаған шиғырҙы тасуири уҡырға әҙерләнәләр.*

***Индивидуаль эштәр:***

*Бер студент М. Кәримдең Муром ҡалаһында уҡыған осоро көндәлектәре хаҡында һөйләргә әҙерләнә.*

*Бер студент тарихсы итеп билдәләнә, ул М.Кәримдең яу юлдарына бәйле Бөйөк Ватан һуғышы ваҡиғаларын һөйләй, элемтәсе, санитаркалар хеҙмәте хаҡында материалдар, Башҡорт атлы дивизияһы тураһында мәғлүмәт әҙерләй.*

***Әҙәбиәт:***


1. *Валеев И.И. Традиции башкирского национального воспитания в творчестве Мустая Карима. Уфа: Китап, 2005.–416с.*
2. *Великая Отечественная война. Живопись. Графика. Скульптура./Составитель Г.Г.Серова Москва.- Издательство «Изобразительное искусство». 1994.*
3. *Кәрим М.С. Әҫәрҙәр. I том. Шиғырҙар һәм поэмалар. Өфө, Башҡортостан «Китап» нәшриәте, 1971, 1972, 1973.*
4. *Кәрим М. Һуғыш һәм хыял. Көндәлектәр // Башҡортостан ҡыҙы.- 2003 - №5.- 1-се бит.*
5. *Мостай Кәрим тормошо һәм ижады. Фотоальбом. Өфө: Китап. 2004. - 240 б.*
6. *Хөсәйенов Ғ. Мостай Кәрим: - Шәхес. Шағир. Драматург. Прозаик.- Өфө.: Башҡортостан «Китап» нәшриәте, 1994. – 416.*
7. *Шәрипов С. Һуғыш үтте, һағыш ҡалды // Авторҙар коллективы. Һуғыш үтте, һағыш ҡалды, Өфө. Башҡортостан «Китап» нәшриәте, 2000.-512 б.*
8. *Дәреслек һәм программалар*

## Дәрес барышы:

**Уҡытыусы**: Һаумыһығыҙ, ҡыҙҙар, егеттәр!

1941 йылдың **22** июне. Күпме халыҡтың йөрәгендә онотолмаҫ эҙ ҡалдырған дәһшәтле көн!

*Магнитофондан «Священная война» йыры яңғырай. (В.Лебедев-Кумач һүҙҙәре, А.Александров көйө.)*

*Бер студент М. Кәримдең «Мин фронтҡа китәм, иптәштәр!» шиғырын тасуири уҡый.*

**Уҡытыусы**: Башҡорт яҙыусылары Бөйөк Ватан һуғышының тәүге көндәренән алып уҡ илебеҙҙең азатлығы өсөн көрәшкә күтәрелә. Улар араһында офицерҙар, гвардеецтар һәм политруктар етерлек була. Элемтәселәр, танкистар, кавалеристар, пехотасылар – күпме яу профессияһына эйә ине улар! Штык үсен ҡәләмгә күсереп, байтаҡ әҙиптәр яу яландарында ла ижад ялҡындарын һүндермәне һәм Еңеү таңын яҡынайтыуға тос рухи өлөштәрен индерҙе.

Улар араһында әҙәбиәткә яңы аяҡ баҫҡан М. Кәрим дә була. Һуғыш йылдарының һәм үҙ быуын кешеләре өсөн оло һынау, патриотизм һәм гражданин рухын тәрбиәләүҙә дәһшәтле мәктәп булыуын һыҙыҡ өҫтөнә ала шағир үҙенең автобиографияһында: «Һуғыш минең өсөн ҙур мәктәп булды. Тыуған илде мин ул йылдарҙа, нисектер, көйөп һәм янып, үҙемсә яраттым. Беҙҙең халыҡтың ул хәтәр йылдарҙағы батырлығы һәм сабырлығы, ҡаты һәм нескә күңеллеге менән мин хәҙер ҙә һоҡланып туя алмайым.»

М. Кәрим – һалдат, М. Кәрим – шағир... Һалдат һәм шағир М. Кәримдең һуғыш осоро ижадына ниндәй үҙенсәлектәр хас? Быны өсөн иң тәүҙә шағирҙың һуғыш осоронда яҙылған шиғырҙарын иҫкә төшөрәйек. Өйҙә һеҙгә был әҫәрҙәрҙе ҡарап килергә ҡушылды.

***Өй эшен тикшереү.*** Һорауҙарға яуап бирегеҙ.

1. «Ай» шиғыры кем иҫтәлегенә бағышланған?
    - ***А. С.Мифтахов;***
    - *В. М.Хәй;*
    - *С. М.Харис.*
2. Кем ул «Ерҙәге йондоҙҙар»?

*A. Сәскәләр;*

***B. Санитарҙар;***

*C. Һалдаттар.*

3. «Ышанысың һаҡлап ут уйнаттым,
Ә ... , һылыуым, юғалттым». Лирик герой нимәне юғалтыуына ҡайғыра? Төшөп ҡалған һүҙ-

*A. «хатыңды»*

*B. «ҡулъяулығыңды»*

**C. *«төрөпкәңде»***

4. *Студенттар иғтибарына Н.Семенов картина репродукцияһы һәм фото тәҡдим итеlә.*



А.Н. Семенов. Подвиг младшего лейтенанта Николая Шевлякова. 1985



М.Кәримдең ниндәй шиғырында ошондай уҡ батырлыҡ күрһәткән П.Банников хаҡында һүҙ бара? Башҡортостандан күкрәге менән дзотты ҡаплаған ниндәй һалдаттарҙы беләһегеҙ, фото буйынса әйтегеҙ.

*A. «Атлылар йыры»*

***B. «Үлемһеҙлек». А.Матросов(Ш.Мөхәмәтйәнов), М. Ғөбәйҙуллин.***

*C. «Дан»*

5. Хәҙер шиғырҙан өҙөк тыңлайбыҙ. Уны Н.Зарипов уҡый(фонояҙма тыңлана). Өҙөк ниндәй шиғырҙан?

***A. «Таш өҫтөндәге гөлдәр»***

*B. «Сит уттар»*

*C. «Днестрҙа май»*

*(Уҡытыусы студенттарҙың яуаптары буйынса билдәләр ҡуя)*

**Уҡытыусы**: М.Кәримдең һуғыш осоро ижады үҙенсәнлекле. Шағир шул осор хаҡында былай ти *(слайдтағы беренсе*

*һөйләмде укый):* ***«Мин бөтә һуғыш буйы туған дивизияма әләгеү тураһында хыялландым, ләкин яҙмыш мине торған һайын унан алыҫыраҡ йөрөтөр. Фронтта яҙылған шиғырҙарымда ат образының йыш осрауы ана шул хыял менән бәйләнгәндер ҙә инде!»***

Ошо һүҙҙәрҙән сығып, М.Кәримдең һуғыш осоро ижадын өйрәнеү йүнәлештәрен бергәләп билдәләйек.

*(Яуаптар, варианттар әйтелә. Укытыусы өҫтәлмә һорауҙар ярҙамында студенттарҙы алда әйтеләсәк йүнәлештәргә еткерергә тейеш)*

Шулай итеп, һеҙгә, беренсенән, шағирҙың яу юлын өйрәнергә, карта буйынса күрһәтергә, икенсенән, ҡайһы осорҙа ниндәй шиғырҙар яҙылғанын тикшерергә, өсөнсөнән, шиғырҙарҙың йөкмәткеһен өйрәнеп, уларҙың идеяһын асыуҙа ат образының ролен асыҡларға кәрәк. Өс төркөмгә бүленеп эшләйбеҙ. Һәр төркөмгә М.Кәримдең һуғыш осоронда яҙылған әҫәрҙәре, биографик белешмә, карта таратыла. Шиғыр һәм поэмаларҙың аҙағында яҙылыу ваҡыты һәм урыны күрһәтелә, ул мәғлүмәткә иғтибарлы булығыҙ.

*Студенттар тәҡдим ителгән әҙәбиәт буйынса тикшеренеү үткәрәләр.*

***I төркөм*** *М. Кәримдең яу юлын карта буйынса таба, флажоктар менән билдәләй һәм ҡыҫҡаса һөйләр өсөн материал туплай.*

***II төркөм*** *ошо флажоктар эргәһенә карточкала яҙылған шиғырҙарҙың исемен беркетә. Укытыусы күрһәткән әҫәрҙәр хаҡында һөйләргә, ҡайһы берҙәрен тасуири уҡырға әҙерләнә.*

***III төркөм*** *шағирҙың һуғыш осоро лирикаһынан ат образы булған шиғырҙарҙы һайлай. Анализлай.*

*Эште башҡарыу өсөн 10 минут ваҡыт бирелә. Укытыусы төркөмдәргә ярҙам итә. Төркөмдәрҙең эшен тикшеререр алдынан тарихсыға һүҙ бирелә. Ул Башҡорт кавалерия дивизияһы хаҡында мәғлүмәт еткерә. Дивизияның яу юлы слайдта күрһәтелә.*




Артабан *I төркөм* вәкиле үҙҙәре әҙерләгән схема буйынса М.Кәримдең яу юлы, ҡайһы илдәрҙе азат итеүҙә ҡатнашыуы, ниндәй вазифалар башҡарыуы хаҡында һөйләй (схема 1)

*II төркөм* ошо осорҙа яҙылған әҫәрҙәрен ҡылыҡһырлай.

*III төркөм* вәкиленә *«М.Кәрим яу лирикаһында ат образы»* темаһы буйынса һүҙ аҙаҡ бирелә. Тыңлап ултырыусылар үҙ дәфтәрҙәренә схема эшләйҙәр.

*М. Кәримдең яу юлы* Таблица 1

| I төркөм яуабы | II төркөм яуабы |
|---|---|
| *М. Кәримдең яу юлы* | *Был осорҙа ниндәй шиғырҙар яҙылған* |
| Һуғыш башланғанда, М. Кәрим Рауза менән яңы ғына тормош ҡорған була. Уны (М. Кәримде) Муром ҡалаһына ҡыҫҡа сроклы хәрби элемтә училищеһына уҡырға ебәрәләр. | 23 июндә үк ул «Үс алынһын!» шиғырын яҙа. Ә унан «Мин фронтҡа китәм, иптәштәр!» шиғырын ижад итә. Хәрби училищела уҡыған сағында ул көндәлек алып бара (*Студенттың көндәлек хаһында сығышы*). |







*Слайдтар*

| | |
|---|---|
| 1942 йылдың февраленда артиллерия дивизияһы штабына элемтә начальнигы итеп тәғәйенләнә. Ауыр һалдат яҙмышы | Был осорҙа шиғырҙарҙы яҙырға мөмкинселек булмай тиерлек. Шулай ҙа ул һөжүм араларында яҙғылаштыра. |

уны төрлө фронт һыҙыҡтарында йөрөтә. *Тарихсы хәрби элемтәселәр хаҡында һөйләй. (һуғыш хаҡында картиналарҙы ҡарау, әңгәмә).*

Әммә был яҙмалары юғала. М. Кәрим ҡайһы берҙәрен тергеҙә. 1942 йылда «Ай», «һөйләшеү», «Төрөпкә» шиғырҙарын яҙа.







1942 йылдың ҡыҙыу авгусында Мценск тигән ҡала янында хәтәр һуғыштарҙың береһендә яралана. Дошман снарядының утлы ярсығы уның күкрәк кеҫәһендәге комсомол билетын тишеп йөрәк япмаһына саҡ ҡына етмәй ҡала.

Ул бер-нисә ай госпиталдә дауалана.

Аҙаҡ, һуғыштан һуң, М.Кәримгә операция яһала һәм ул ғүмеренең аҙағынаса бер үпкә менән йәшәй.

Госпиталгә һалғандан һуң 3-4 ай үткәс, ҡулына ҡәләм тоторлоҡ хәлгә инә. Ул «Ерҙәге йондоҙҙар» шиғырын яҙа. (*Санитарҙар, медсестралар хеҙмәте хаҡында тарихсының белешмәһе.)* Үлемдән ҡотҡарыусы санитар образы М. Кәрим күңелендә оҙаҡ һаҡлана, 1944 йылда уларға бағышлап, «Ул ҡыҙ мине ташлап китмәне» шиғырын яҙа.

Ошо осорҙа «Декабрь йыры» поэмаһы (1942 й.) ижад ителә.






Шағир һауығып яңынан сафка баҫкас, уны «За честь Родины», «Советский воин» фронт гәзиттәрендә журналист итеп тәғәйенләйҙәр. Был осорҙа М. Максад, А. Недогонов, Н. Сафаров, Н. Атаров кеүек ҡәләм оҫталары менән аралаша. Украина, Молдавия, Румыния, Болгария, Венгрия, Австрияны азат итеүҙә ҡатнаша. М.Кәрим хәрби журналист булараҡ яуаплы заданиелар үтәй, ул йыш ҡына иң ҡатмарлы, иң яуаплы участкаларҙы оператив материалдар менән тәьмин итеп тора.

Һуғыштағы батырлыҡтары өсөн 1-се һәм 2-се дәрәжәләге Ватан ордендары, Ҡыҙыл йондоҙ ордены һәм күп һанлы миҙалдар менән наградлана. *Ысынлап та, яҙмыш М.Кәримде Башкорт атлы дивизияһынан ситтә йөрөтә. Әммә уларҙың бөтәһенең дә максаты уртаk була - Тыуған илебеҙҙе һаklау.*

Һуғыш осоронда яҙылған әҫәрҙәренең күбеһе Украинала ижад ителә: «Украина», «Ҡол ҡыҙ йыры», «Киев», «Ямғыр», «Атлылар анты», «Гөрләп үтте тәүге күкрәү», «Полктар уҙалар», «Башҡорт халҡына яуап хаты», «Яҡты төн», «Үлемһеҙлек» исемле шиғырҙар(1943й.), «Үлмәҫбай» поэмаһы (1942-1944 й.) Был шиғырҙарында совет һалдаттарының батырлығы, уларҙың күңел хистәре, Украина ерендәге фашистарҙың аяуһыҙлығы һ.б. тасуирлана.

Румынияны азат иткән осорҙа – «Румыния аша хәрби юлъяҙмалар», Болгарияла – «Сит уттар» шиғырҙар циклы, Венала – «Европаға май килә», «Еңеү» исемле әҫәрҙәрен ижад итә. Аҙkkы шиғырҙарының береһе- «Таш өҫтөндәге гөлдәр».
М.Кәрим әҫәрҙәрендә ябай һалдат кисерештәре һүрәтләнә, шиғырҙар көрәшкә рухландыра, Тыуған илде һаkларға саkыра.







«Шағирҙың яу юлы картаһы» яkынса ошолай килеп сыға.

(*Европа картаһын kулланырға мөмкин*)

## Шағирҙың яу юлы картаһы Схема 1



III төркөм яуабы: *«М.Кәрим яу лирикаһында ат образы».*

*М. Кәримдең һуғыш осорондағы тәүге шиғырҙарының береһендә - «Мин фронтҡа китәм, иптәштәр!» шиғри әҫәрендә үк беҙ ат образы менән осрашабыҙ (Өҙөгөн тасуири уҡыу). Лирик герой атаһы эйәрләгән Аҡбуҙ атҡа атлана. Әсәһе, атаһы, халҡы алдында ант бирә.*

*2-се шиғыр – «Минең атым». Бында яраланған һалдаттың яу яланына елгән ярһыу уйҙары сағыла. Һалдат Аҡбуҙаты менән яуға ашҡына (Өҙөгөн тасуири уҡыу). Был осорҙа М.Кәрим госпиталдә ята, әҫәрҙән күреүебеҙсә, ул тиҙерәк һуғышҡа атлыға.*

*«Атлылар анты», «Атлылар йыры», «Яр ситендә ҡамыштар болғана», «Днестрҙа май» шиғырҙарында атлы егеттәр тасуирлана. Шағирҙың яу йылдарында яҙған шиғырҙарын һәм поэмаларын туплаған бер китабы исеме лә «Минең атым» тип атала. Борон-борондан башҡорт егеттәре ат менән яуға барыр булған, улар атта оҫта һуғышҡан. М.Кәримдең шиғырҙарын уҡығанда күҙ алдына шундай көслө лә, ғәйрәтле лә, ҡыйыу ҙа атҡа атланған башҡорт атлы дивизия һалдаттары - беҙҙең егеттәр килеп баҫа.*

**Уҡытыусы**: Фекерегеҙ менән килешәм һәм Ғ. Хөсәйенов һүҙҙәре менән йөпләп ҡуям: «М. Кәримдең яу лирикаһында сағылған аҡбуҙ атлы батыр егете Бөйөк Ватан һуғышы фронттарында ҙур ҡаһарманлыҡтар күрһәткән башҡорт атлы дивизияһының бер типик лирик образы тип тә иҫәпләрлек»,- ти ул.



*(Уkытыусы 1-се һорау буйынса эште йомғаklай, төркөмдәрҙең эшен баһалай.)*

**Уkытыусы** *таkталағы 2-се һөйләмде уkый.* **«Һуғыш осоро поэзияһында халыkтың үҙ улдарына йөрәк һүҙҙәрен еткереүсе шиғри наказ, шиғри хат алымдары kулланып яҙылған әҫәрҙәр тыуа», - тип билдәләй Ғималова М.Ғ.**

**Ә шағир М. Кәрим ниндәй алымдарҙы, жанрҙарҙы kуллана?**

*(Студенттар төркөмдәрҙә үҙ-ара кәңәшләшеп эшләйҙәр, әҫәрҙәрҙең жанрын билдәләйҙәр)*

***Яуап.*** *(1 төркөм яуап бирә, kалғандары өҫтәй) М.Кәрим төрлө жанрҙарҙа эшләй. Шулай ҙа иң яратып kулланғаны - шиғыр. Ғималова М.Ғ. әйткән шиғри хатты ла kуллана. «Башkорт халkына яуап хат» - быға асыk миҫал. Борон-борондан илебеҙ өсөн ауыр мәлдәрҙә сәсәндәр, шағирҙар хитап менән халыkkа мөрәжәғәт итер була. М.Кәримдең әҫәрен халыk яратып kабул итә. Шулай уk ул «Үлмәҫбай», «Декабрь йыры» поэмаларын яҙа, шиғырҙар циклын, юлъяҙмалар ижад итә, гәзит хәбәрсеһе булғас, мәkәләләр ҙә яҙа.*

**Уkытыусы:** *Таkталағы 3-сө һөйләмде уkыйыk.* **«Беҙҙең быуат бик шаулы, уны һөрәнләп кенә kаплап булмай, ләкин алғы фронт һыҙығында булған һәр кем шуны белә: kолаk тондорғос шау эсендә лә һалдат йөрәген берәй kош һайрауы, бала көлөүе, кешенең шым ғына өндәшеүе лә дер һелкетә ала». И. Эренбург. Ғ.Хөсәйенов иҫәпләүенсә, был һүҙҙәр М. Кәрим шиғриәтенә лә хас. Ни өсөн?**

**Уkытыусы:** 1. «Төрөпкә» шиғырын тикшерәйек. Унын сюжеты ниндәй? Тыуған яkтан килгән бүләккә һалдат нисек kарай? Һалдатты нисек итеп күҙ алдына баҫтыраһығыҙ. Уға ниндәй сифаттар хас, тип уйлайһығыҙ?

2. «Ямғыр». Һалдат ямғырға бәйле ниндәй ваkиғаларҙы иҫкә төшөрә. Ни өсөн бөгөнгө ямғыр уны kыуандырмай? Был уйынан ваз кисергә нимә мәжбүр итә? Аҙаkkы строфалағы һүҙҙәргә иғтибар итегеҙ, һалдат ни өсөн «яуһын әйҙә!» тигән фекергә килә? Был шиғыр менән автор нимә әйтергә теләгән?

3. «Гөрләп үтте тәүге күкрәү...» Һалдатты нимә һokландыра? Тәүге строфа менән икенсе строфаны сағыштырығыҙ. Бында

нимәләр сағыштырыла? Өсөнсө строфалағы «Зәңгәрһыу керпектәренән йәш түгел, йәшәү тама» һүҙҙәрен нисек аңлайһығыҙ? Автор был шиғырҙа нимәне раҫлай? *(Үлемдән йәшәү көслө.)*

4. «Беҙҙе таңмы әллә солғағайны...» Герой нимәне иҫкә төшөрә? Һуғыш михнәттәре унаң күңелен ҡатырғанмы?

*Уҡытыусы:* Ошо тикшергән шиғырҙарҙан сығып һығымта яһайыҡ. Һанап үткән әҫәрҙәрҙә һалдат образы ниндәй сифаттары менән иҫтә ҡала? Дөйөм ҡылыҡһырлама бирегеҙ әле.

**Яуап:** *Әгәр шағир бер төркөм шиғырҙа һыбайлы образында һалдаттың дошманға үс менән ҡайнаған ғәйрәтлелек сифаттарын беренсе планға ҡуйып тасуирлаһа, быларында унаң физаҡәрлек, сабырлыҡ, нескә күңеллелек һыҙаттарын һүрәтләүгә иғтибар итә. Шиғырҙарҙа һүрәтләнгән лирик герой күңелен һуғыш ҡатырмаған, уны, ысынлап та, «ҡош һайрауы, бала көлөүе, кешенең шым ғына өндәшеүе лә дер һелкетә ала».*

**Уҡытыусы:** Ә М. Кәрим үҙе «Үҙ шиғырҙарымда совет һуғышсыһын мин үҙ бурысын тыныс башҡарыусы, шул уҡ ваҡытта ошо эштәрен ҡаһарманлыҡҡа һанауҙы уйына ла килтермәүсе кеше итеп күрһәтергә тырыштым,» - тип яҙа. Ғ.Хөсәйенов һүҙҙәре менән әйткәндә, сабыр һәм түҙем холоҡло һалдат кеүек, М. Кәрим поэзияһы ла сабыр була.

**Уҡытыусы:** Һәм бына көтөлгән көн килеп етә. 1945 йылдың 9 майы. (*«День Победы» йыры яңғырай. Харитонов В. һүҙҙәре, Тухманов Д. көйө. Бер студент «Еңеү» шиғырын уҡый.)*

**Уҡытыусы** (слайдта картиналар күрһәтелә)*:* Бына ҡарағыҙ: һуғыш ваҡиғалары, ниндәй ҡурҡыныс, ҡот осҡос улар.

*Һуғыш. Шағир. Шиғырҙар...* Һуғыштың кешелеккә үлем килтереүен шағирҙар беҙгә шиғырҙар аша еткерәләр, иҫкәртәләр, тыныслыҡтың ҡәҙерен белергә өйрәтәләр. Шиғырҙар беҙгә һабаҡ бирәләр. ***Һуғышты ла, шағирҙарҙы ла, шиғырҙарҙы ла онотмайыҡ.***

**Дәресте йомғаҡлау.** *Студенттар төркөмдәрҙең тикшеренеү эштәрен баһалайҙар. Уҡытыусы сығыштарҙы, яуаптарҙы, уҡыусыларҙың тасуири уҡыуын анализлай, кәңәштәр бирә.* ***Өй эшен биреү***

*МИНИСТЕРСТВО ОБРАЗОВАНИЯ РЕСПУБЛИКИ БАШКОРТОСТАН*

*ГОСУДАРСТВЕННОЕ БЮДЖЕТНОЕ ПРОФЕССИОНАЛЬНОЕ ОБРАЗОВАТЕЛЬНОЕ УЧРЕЖДЕНИЕ*
*«ТУЙМАЗИНСКИЙ ПЕДАГОГИЧЕСКИЙ КОЛЛЕДЖ»*

# *Шағир һәм һалдат М. Кәримдең яу юлдары буйлап*

*Әҙәбиәт йылына арналған конкурсҡа башҡорт әҙәбиәте буйынса дәрес*

*Төҙөүсеһе:* ***Кәримова Гөлнара Яхъя ҡыҙы,***
*Туймазы педагогия колледжының юғары категориялы башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы, Башҡортостан Республикаһының мәғариф алдынғыһы*

***Туймазы, 2015***